*Йортоъозъа – ырыҫ һәм бәхет!*

# Ауыл уттары

12+

№ 23 (9520)

20 март шишәмбе 2018

Гәзит 1931 йылдың 29 декабренән нәшер ителә.

1439 һижри йыл, Рәжәб айының 2-се көнө.

БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ЙЫЛАЙЫР РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫНЫҢ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ГӘЗИТЕ

Беҙҙең сайт: http://rbsmi.ru/aul_uttara/ Яңылыҡтар порталы: www.pressa-rb.ru E-mail: selskieogni@bk.ru; auyl.gazeta@yandex.ru; sel_ogni@ufamts.ru




## Районда һайлау ҙур ойошҡанлыҡ менән үтте



**Рәсәй Президентын һайлауҙа беҙҙең район халҡы әүҙем ҡатнашты. Районда халыҡ үҙ ихтыярын белдерә алһын өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылғайны.**

Был көндө иртән үк һайлауға килгән халыҡты дәртле көйҙәр яңғырап торған участкалар ҡаршы алды. Шунда уҡ байрам йәрминкәһе ойошторолдо, сауҙа нөктәләре эшләне, һайлауға ата-әсәләре менән килгән балалар өсөн күңелле уйындар үткәрелде. Бер һүҙ менән, һайлауға халыҡ байрам кәйефендә килде.

Район территориаль һайлау комиссияһының алдан иҫәпләүҙәре күрһәтеүенсә, сәғәт киске һигеҙгә райондың һайлаусылар исемлегенә индерелгән халҡының 87,59 проценты тауыш биргән ине. Суртанүҙәк, Ҡаҙырша ауылдары халҡы һайлауҙа 100 процент ҡатнашты, тип иғлан ителде. Шулай уҡ Васильевка, Надеждинск, Дмитриевка ауылдары ла – лидерҙар иҫәбендә: уларҙа һайлаусыларҙың 95-97 проценты тауыш биргән.

Райондағы барлыҡ һайлау комиссияларының да эшен маҡтап телгә алғы килә.

Башҡортостанда тауыш бирергә хоҡуҡлыларҙың 75,45 проценты ил Президентын һайлау көнөндә граждандыҡ бурысын үтәгән. Республика үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе кисәге йомғаҡлау брифингы ваҡытында һайлау һөҙөмтәләре буйынса ошондай һандарҙы иғлан итте.

Бабурин С.Н. – 0,69%
Грудинин П.Н – 12,09%
Жириновский В.В. – 5,03%
Путин В.В. – 77,69%
Собчак К.А. – 1,26%
Сурайкин М.А. – 0,89%
Титов Б.Ю. – 0,69%
Явлинский Г.А. – 0,84%.

**Гөлгөнә ТАҺИРОВА.**
**В.Климов, Б.Солтанов һәм автор фотолары.**

♦ <u>Йәмғиәт һәм дин</u>

## Милләт-ара мөнәсәбәттәр — алғы планда

**Күп милләтле Башҡортостаныбыҙ һәр саҡ башҡа төбәктәргә төрлө халыҡ вәкилдәренең татыу йәшәү өлгөһө булды. Беҙҙә милләт-ара мөнәсәбәттәр өлкәһендә ҙур тәжрибә тупланған. Әйтергә кәрәк, быны федераль кимәлдә лә юғары баһалайҙар. Республикала йәшәүсе барлыҡ халыҡ мәнфәғәттәре тигеҙ ҡайғыртыла, барыһына ла йәшәү, үҫеү өсөн уңайлы шарттар тыуҙырылған. Был йәһәттән урындарҙа ла, планға ярашлы, маҡсатлы эш алып барыла.**

Яңыраҡ конфессия-ара мөнәсәбәттәр буйынса район комиссияһының сираттағы киңәйтелгән ултырышы үтте. Комиссия ағзалары, мосолман һәм православие руханиҙары, прокуратура, полиция бүлексәһе хеҙмәткәрҙәре, киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре ҡатнашлығында үткән был мөһим сарала уҙған йылда башҡарылған эш һөҙөмтәләре барланды, яңы эш йүнәлештәре билдәләнде.

Ултырышты район хакимиәте башлығының урынбаҫары, комиссия рәйесе А.В. Коротков асты. Башта Александр Васильевич комиссия ағзалары һәм беренсе ултырышта ҡараласаҡ мәсьәләләр теҙмәһе менән таныштырҙы. Артабан ул йыйылыусыларға республика Башлығы ҡарамағындағы Дәүләт-дин мөнәсәбәттәре буйынса совет рәйесе Вячеслав Пятковтың 2017 йылда Башҡортостан Республикаһы территорияһында дини хәл-торош һәм дәүләт-конфессиональ мөнәсәбәттәр тураһындағы докладын уҡып ишеттерҙе.

3-сө бит

ҠАЙҘА? НИМӘ? ҠАСАН?

### Ҡайҙа үлем менән һатыу итәләр, хәбәр ит!”

**Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостан территорияһында ла “Ҡайҙа үлем менән һатыу итәләр, хәбәр ит!” Бөтә Рәсәй наркотиктарға ҡаршы акцияһы бара. Ул 23 мартҡа тиклем дауам итәсәк.**

Әгәр һеҙгә ҡайҙалыр кемдеңдер наркотиктар һаҡлауы, ҡулланыуы, таратыуы билдәле булһа, был турала аноним рәүештә полиция бүлегенә хәбәр итә алаһығыҙ. (8-34752) 2-22-02, 2-15-37, 8-927-358-48-76 телефондарына шылтыратыуҙар тәүлек әйләнәһенә ҡабул ителә.

### Саңғысылар, саңғыға баҫығыҙ!

**23 мартта (йома) Йылайырҙа район хакимиәте башлығы кубогына саңғыла уҙышыу буйынса район беренселеге үткәрелә.**

Ярышта белем биреү учреждениелары, ауыл биләмәләре, хеҙмәт коллективтары командалары, шулай уҡ ауыл биләмәләре башлыҡтары менән хеҙмәт коллективтары етәкселәре ҡатнаша. Биләмә башлыҡтары һәм етәкселәрҙән башҡа командаларҙың составында 2 ир-егет һәм 1 ҡатын-ҡыҙ (белем биреү учреждениеларынан – 18 йәшкә тиклемге 2 үҫмер һәм 1 ҡыҙ) булырға тейеш.

Ир-егеттәр (үҫмерҙәр) – 3 километрға, ҡатын-ҡыҙҙар 2 километрға уҙышасаҡ.

Етәкселәр һәм ауыл биләмәләре башлыҡтары өсөн дистанция урында билдәләнәсәк.

Ярыш иртәнге сәғәт 10-да башлана.

| Һауа торошо | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 21 март | көндөҙ – 1 | төндә – 7 | | | |
| 22 март | көндөҙ + 1 | төндә + 1 | | | |
| 23 март | көндөҙ – 5 | төндә – 4 | | | |